Муниципаль  мәктәпкәсә белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үҫтереү үҙәге -   «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**Ата-әсәләр  өсөн консультация:**

# Мөнәсәбәттәр балала сағыла



Тәрбиәсе:
Йыһангирова
Марат   ҡыҙы

# Мөнәсәбәттәр балала сағыла

Бала холҡоноң күп һыҙаттары ғаиләләге үҙ-ара мөнәсәбәттәр һөҙөмтәһендә формалаша. Ата-әсәйҙең үҙ-үҙен тотошо ҡай саҡ ғаиләләге ҡапма-ҡаршылыҡтарға һәм  тәрбиәләүҙә ҡатмарлыҡтарға килтерә. Өйҙәге аңлашылмаусанлыҡтар баланың күңел төшкөнлөгөнә бирелеүенең төп сәбәбе булып тороуы бар. Миҫал килтерәйек. Баланың өләсәһе (әсәһенең әсәһе) бик бойороусан, усал булған, ти. Ул артыҡ талапсан, шул уҡ ваҡытта ҡыҙының үҙ аллы булыуына, үҙен яҡлай алмауына ышанмаған, мөмкин булған бар юлдар менән һәр саҡ балаһын ҡурсып тороп кәрәк тип һанаған. Һөҙәмтәле ҡыҙы үҙенә ышанмаҫ, ҡурҡаҡ булып үҫә, мәсьәләләрҙе үҙ аллы хәл итә алмай. Үҙе әсәй булғас, ул ҡурҡыуын балаһына күсерә. Был ҡатындың холҡо үҙ әсәһенекенә ҡарағанда йомшағыраҡ, шулай ҙа уның фиғеленән күп нәмәне үҙенә алған. Бала киләһе минутта әсәһенән нимә көтөргә икәнлеген белмәй, һөҙөмтәлә күңел төшөнкөлөгенә бирелә.



Быҙдай әсәйҙәр бик һиҙгер була, ул балаһының үҙ-үҙенә ышанмауына, ҡурҡыуына, илауына, башҡалар менән аралаша белмәүенә шунда уҡ иғтибар итә. Үҙегеҙҙә ошондай әсәйҙең һыҙаттарын күрәһегеҙ икән, ваҡытында туҡтау мөһим икәнлеген аңлағыҙ. Балағыҙҙың үҙ аллы булыуы, үҙенә ышанып үҫеүе өсөн ни эшләргә, үҙендә нисек тоторға икәнлеге хаҡында уйлағыҙ! Ысын мәғәнәһендә бала өсөн хәүефле нәмәләрҙең шул тиклем күп булмауын аңлау хәлегеҙҙе еңеләйтер. Хәүефле нәмәләрҙе, хәлдәрҙе анығ билдәләгеҙ һәм баланан ошоға бәйле ҡағиҙәләрҙе һәр ваҡыт үтәүен талап итегеҙ. Ҡурҡыныс янамағанда иһә баланың уйынына ҡыҫылмағыҙ, ирек һәм үҙаллылыҡ бирегеҙ. Шул



саҡта уны кәрәгенә артыҡ ҡурсалауҙан ҡасырһығыҙ, үҫешенә лә зыян килтермәҫһегеҙ.

Башҡа төрлө хәлдәр ҙә булыуы бар. Балаһын яңғыҙы ғына тәрбиәләнгән, юғары белемгә эйә, яҡшы эштәге ҡатынҡыҙҙар араһында ла, эшендә артыҡ тотҡарланып йәки үҙе уйлап сығарған ялған ҡағиҙәләргә таянып, балаһын шаштырыуҙан ҡурҡып, бәләкәсенә күңел йылыһын биреп еткерә алмаған хәлдәр ҙә осрай. Бала өсөн әсәһе менән аралашыуҙа мөмкин булған алым булып ҡурҡыу, ныҡ итеп йүткереү, әсенең сәбәпһеҙ артыуы ҡала. Был хәлдәр иғтибар йәлеп итеү һәм әсәнең мөнәсәбәттән йомшартыу өсөн үҙенән-үҙе килеп сыға. Ҡәҙерле бәләкәсегеҙ һөйөүгә мохтаж. Уның менән күберәк ваҡыт бергә булырға тырышығыҙ. Бергә уйнағыҙ, ҡеүәтләгеҙ, дәртләндерегеҙ, балалар баҡсаһындағы тормошо менән ҡыҙыҡһынығыҙ.

Балалар өсөн иң яҡшыһы – ғаиләләге тәбиғилек, тормошто яратыу, унан тик яҡшылыҡ көтөү, еңеллек хөкөм һөрөүе. Дуҫтарығыҙҙы балалар менән бергә ҡунаҡҡа саҡырығыҙ йәки бергәләп киноға, театрға, кафеға барығыҙ, паркта йөрөгөҙ. Был ваҡытты күңелле итеп үткәреү генә түгел. Бындай осрашыуҙар балаларығыҙҙың тиҫтерҙәре менән яҡшыраҡ аралашыуында, үҙ-үҙенә ышанысла артыуында бик әһәмиәтле.



Бәләкәсегеҙҙең файҙалы шөғөлдәрен күреп, баһалағыҙ. “Ниндәй матур һүрәт”, “Һауыт-һабаны йыуғаның (йыуышҡаның) өсөн рәхмәт”, “Калай ҡыҙыҡ әйбер һөйләнең һин!”, “Сәсенде үҙең тарап та ҡуйғанһың, афарин!” тип әйтеү генә лә кескәй кешенең күңелен күтәрә, дәртләндерә.

“Һин бик аҡыллы ҡыҙ!”, “Бик ҡыҙыҡ уйлап тапҡанһың!”, “Был йомаҡҡа яуапты еңел генә таптың да ҡуйҙың”, “Һин шәп йүгерәһең” тигән һүҙҙәр баланың һәләтен үҫтерергә лә ярҙам итер. Бәләкәсегеҙҙең донъяны өйрәнеүе, төпсөнөүе, ҡыҙыҡһыныуы һеҙгә оҡшағанын әйтегеҙ, теләгенә, һорауына ҡолаҡ һалығыҙ.



Һәр беребеҙҙең эше күп, хаталарҙын да бер кем дә азат түгел – бөтә нәмә өсөн дә үҙеңде ғәйепләү кәрәкмәй. Үҙегеҙгә, ата-әсәгә генә хас булған һиҙгерлегегеҙгә ышанығыҙ. Һеҙ үҙегеҙ уйлағандан да күберәк беләһегеҙ. Һиҙемдәүегеҙгә таянығыҙ, балаларығыҙҙың фекерен ҡолаҡ һалығыҙ, улар өсөн көсөгөҙҙән килгәнде эшләгеҙ.